*Раuил ЙӘНСУРИН,*
*Темәс ауылы хакимиәте башлығы*

# ТАРИХ ДАУАМ ИТӘ

Һаҡмар йылғаһы буйында, Рапат һәм Яғалса тауҙары итәгендә борон бер башҡорт тирмә ҡорған. Һәммәһе лә мул булған был ерҙә: урманында кейеге, йылғаһында балығы, һауаһында ҡошо, яланында һутлы үләне. Йәйләүҙән йәйләүгә күсеп йөрөгән башҡорттар ошо бай ерҙә төпләнеп алған, уларға башҡа төбәктәрҙән дә килеп ҡушылғандар. Бындағы тәбиғәт байлыҡтары барыһын да туйындырған.

Тиҙ үҫешеп киткән ауыл тәүҙә Ҡайыпҡай тип аталған. Һуңыраҡ уны 1737 һәм 1755 йылғы башҡорт ихтилалдары батыры Темәс Илекәев хөрмәтенә Темәс тип йөрөтә башлағандар.

Башҡортостан тарихында мөһим булған күп кенә ваҡиғалар Темәс менән бәйле. 1919 йылдың 21 февралендә Темәстә ҡыҙылдар яғына күскән полктар вәкилдәренең съезы үтә. Был йыйында Башҡорт Совет республикаһының Ваҡытлы революцион комитеты (Башревком) ойошторола. Ә 20 марттан 1920 йылдың авгусына тиклем Темәс Кесе Башкортостандың мәркәзе була.

Темәс ауылы элек-электән мәҙәни һәм белем биреү үҙәге, педагогик кадрҙар әҙерләү төбәге булараҡ билдәле. Әле 1864 йылда уҡ ауылда бер баҫҡыслы урыҫ-башҡорт мәктәбе асыла, ә 1906 йылдан 6 йыллыҡ ике баҫҡыслы мәктәп эшләй һәм уны тамамлаусылар совет осороноң тәүге уҡытыусылары була. 1920 йылда ауылда башҡорт мәктәптәренә уҡытыусылар әҙерләү өсөн педагогик курстар асыла. 1922-24 йылдарҙа Бөрйән-Түңгәүер кантоны үҙәге Темәстә педагогия техникумы эшләй, ә 1934 йылда ауылға Ырымбур педагогия техникумы күсерелә.

Егерме йыл эшләү дәүерендә Темәс педучилищеһы Көньяҡ Урал райондарының мәҙәни тормошонда тәрән эҙ ҡалдыра. Ил өсөн ауыр йылдарҙа халыҡҡа дөйөм белем биреүгә өлгәшеү, халыҡ мәғарифы системаһын яңыртыу, тәүге милли кадрҙар әҙерләү ошо училище һәм уны тамамлаусыларҙың исеме менән бәйле. Был уҡыу йортон тамамлаусылар араһында бөгөн илгә билдәле күп шәхестәр: фән һәм техника, мәҙәниәт һәм мәғариф, әҙәбиәт һәм сәнғәт әһелдәре бар.

Эйе, ауылдың тарихы бай. Ул Зәки Вәлиди, Муса Мортазин, Шәһит Хоҙайбирҙин исемдәре менән бәйле. Ошо тарихты киләсәк быуындарға еткереүҙә, ҡиммәтле документтар һәм ҡомартҡыларҙы туплау һәм һаҡлауҙа тарих-крайҙы өйрәнеү музейының эше баһалап бөткөһөҙ.

Бөгөн Темәс Баймаҡ районында һәм Көньяҡ Уралда иң эре ауылдарҙың береһе — өс меңдән ашыу кеше йәшәй.

Башҡортостан Республикаһы Президенты Указы менән 1994 йылда Темәс тарихи-мәҙәни үҙәк тип иғлан ителде, «Темәс ауылы» фонды булдырылды. Республика хөкүмәте бүлгән аҡса ауылды социаль һәм иҡтисади яҡтан тергеҙеүҙә күп эштәр башҡарырға мөмкинлек бирҙе. Мәсет, клуб, базар комплексы, тирмән — былар бөтәһе лә яңы хәҙер. Өфө менән ауыл араһы тура юл менән тоташты, урамдар асфальтлана, һыу, газ үткәреү мәсьәләләре хәл ителә.

Баш ҡаланың Киров районы Башҡортостандың тәүге мәркәзен шефлыҡҡа алды — хакимиәттәр араһында хеҙмәттәшлек тураһында килешеү төҙөлдө.

Темәс ауылының тарихы дауам итә.

*Икенсе Бөрйән-Тәнгәүер кантоны хакимиәте бинаһы. Хәҙер бында музей.*

